# Мөхәммәтша Буранғол

*(1888—1966)*

**Тормош юлы. Бала сағы. Мәҙрәсәләрҙә уҡыуы. Хеҙмәт юлының башланыуы.** Мөхәммәтша Бурангол (Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранголов) 1888 йылдың 15 декабрендә элекке Һамар губернаһының Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын олоҫо (хәҙер Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районы) Үрге Ильяс (Тәңес) ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуган. Үҙенең автобиографияһында яҙыуынса, 1900 йылда үкһеҙ етем ҡалып, агалары тәрбиәһендә үҫә. Күршеләге Иҫке Юлдаш ауылында земство мәктәбен тамамлай һәм 1901 йылда Ырымбур ҡалаһына сыгып китә. Йәйгеһен Ырымбур байҙарының сәйханаларында официант булып эшләй, ҡыштарын иһә Сәйет биҫтәһендәге Ҡарғалы мәҙрәсәһендә белем алыуын дауам итә. 1903—1906 йылдарҙа йәйгеһен Аҡтүбә өйәҙенең ҡаҙаҡ ауылдарында балалар уҡыта. 1907, 1908 йылдарҙың йәйге мәлдәрендә башҡорттар араһында өҫтәмә иҫәп-хисап эштәре ваҡытында тәржемәсе сифатында Башҡортостан буйлап оҙон юлдар үтә. Был эште ул, үҙе әйткәнсә, баnҡорт фольклорын йыйыу өсон дә файҙалана. 1909, 1911 йылдарҙың йәйендә йәнә ҡаҙаҡ араһында мөғәллимлек итеү менән шөғолләнә, ҡыштарын Ырымбурҙың «Хөсәйениә» мәҙрәсәһендә уҡый.

**М. Буранғол — уҡытыусы, мәғариф һәм йәмәғәт эшмәкәре.** 1912—1916 йылдарҙа Мөхәммәтша Бурангол Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Ҡайыпҡол ауылында уҡытыусы булып эшләй. 1914 йылда Ҡайыпҡол йәмгиәтенең дөйөм йыйылышы, хәрби мобилизацияһан льгота биреләүенә иҫәп тотоп, үҙҙәренең мөғәллиме М. Буранголовты муллалыҡ хоҡуғында приход мәктәбенең уҡытыусыһы итеп тәғәйенләү тураһында ҡарар ҡабул итә. Үкенескә ҡаршы, халыҡтың ихтыяры менән хәл ителгән был вазифа өсөн Мөхәммәтша Буранголовҡа аҙаҡ, совет осоронда, йәнәһе, ул мулла булған тигән ғәйепләүҙәр, һәр төрло бүтәнсә яла ягыуҙарҙы күтәрергә тура килә. 1916 йылда М. Буранғолов үҙ төйәгенең өйәҙ ҡалаһы Быҙаульгкҡа барып, халыҡ мәгарифы бүлегенә милли мәктәптәр инспекторы булып урынлаша.

«1917 йылдың ноябрендә, — тип яҙа үҙенең автобиографияһында М. Буранголов, — ойоштороу йыйыны — ҡоролтай үткәрелеп, унда Башҡорт автономияһы иглан ителде.



Мөхәммәтша Буранғолов — шәкерт

Ошо ваҡиғанан һуң Быҙаулыҡ өйәҙендә йәшәгән башҡорттар Туҡ-Соран кантонына индерелде һәм кантонлыҡ идараһы эргәһендә халыҡ мәғарифы бүлеге ойошторолдо. Унда мине кантондың халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнеләр». 1919 йылдың февраленән 1920 йылдың декабренә тиклем Мөхәммәтша Буранғолов — Туҡ-Соран кантоны башҡарма комитетының рәйесе. 1918 йылдың февралендә Ырымбур хәрби-революцион комитеты, башҡорттарға ҡарата күрә алмаусанлыҡ сәйәсәте үткәреп, Башҡорт хөкүмәтен тулайым ҡулға ала. Был хәл башҡорттар араһында бик ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Милләт-ара ыҙғыштар тыуыу хәүефе барлыҡҡа килә. Шуға юл ҡуймау ниәтендә Бәхтигәрәй Шәфиев һәм Мөхәммәтша Буранғолов, сабырлыҡ менән эш итергә саҡырып, халыҡҡа матбуғат аша мөрәжәғәт менән сығалар. М. Буранғоловтың «Башҡорт тугандар»ға исемле мөрәжәғәте 1918 йылдың 8 мартында «Яңы ваҡыт» гәзитендә баҫыла. Ул шулай уҡ Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыуҙың сәбәптәрен асыҡлау өсөн ойошторолған комиссияға халыҡ вәкиле итеп индерелгән була. Әммә уға был эштәре өсөн, ике йыл үткәс, Вәлидиҙе хуплаусы булараҡ, бер нисә ай төрмәлә ултырып сығырға тура килә.

1921 йылдан башлап ун ете йыл буйы Башҡортостандың төрлө райондарының мәктәптәрендә һәм педагогия техникумында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. 1937 йылда, ситтән тороп, педагогия институтының дүрт курсын тамамлай, 1938 йылда Өфөгә күсә һәм бер нисә йыл буйы Башҡортостан Тел һәм әҙәбиәт (хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт) ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр, бер аҙ ваҡыт Башҡорт дәүләт драма театрында әҙәби консультант булып эшләй. Был ҡыҫҡа ғына осор эсендә фольклорсы ғалим булараҡ та, драматургия өлкәһендә лә гәйәт ҙур эштәр башҡара: ошоға тиклем йыйнап килгән бихисап фольклор материалдарын барлап, системаға килтереп, төрлө йыйынтыҡтар төҙөй. Фольклор мотивтары һәм эпос сюжеттарын файҙаланып, пьесалар, либреттолар яҙа, күләмле поэтик

әҫәрҙәр ижад итә. Әммә КПСС Үҙәк Комитетының 1945 йылдың 27 ғинуарында ҡабул ителгән «Башҡортостан партия ойошмаһында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» тигән ҡарарында нахаҡҡа буржуаз милләтселектә ғәйепләнгәндән һуң быға тиклем дә асылда әҙәрлеклəүгә дусар ителгән әҙиптең яҙмышы ҡырҡа үҙгәрә, уның исеме лә, ижады ла оҙаҡ йылдар буйы тыйылып һәм быуылып торола. Үҙ ғүмерендә ул, беҙгә билдәле булыуынса ғына ла, биш тапҡыр ҡулға алына. Беренсе мәртәбә 1918 йылда Ҡазанда үткәрелгән Бөтөн Рәсәй педагогия йыйылышында ҡатнашҡан осөн аҡтар тарафынан хибескә бикләп ҡуйылған булһа (бынан уны тиҙҙән ҡыҙыл партизандар отряды һәм тимер юлсылар дружинниктары ҡотҡарып сығара), артабан, вәлидовсылыҡта һәм милләтселектә ғәйепләнеп, 1920, 1929, 1937 йылдарҙа йәнә өс тапҡыр төрмә рәшәткәһе артында ултырып сыға. 1920 йылда ул, алда әйтелгәнсә, Зәки Вәлидиҙең эштәрен хуплауы булараҡ, Ильяс Алкин, Ғариф Хужаев, Хәлим Әмиров менән бергә Мәскәүҙең Бутырка төрмәһенә бикләнеп, дүртәүләшеп В. И. Ленинға хат яҙғандан һуң, Совет хөкүмәте етәксеһенең ярҙамы арҡаһында азат ителә. 1929 йылда бер аҙ ваҡыт һаҡ аҫтында тотоп сығарыла. 1937 йылдың 23 декабренән башлап иһә ете ай буйы Өфө төрмәһенең һендерәләрендә көн үткәрергә тура килә. Был юлы уны НКВД начальнигы, ғәжәпкә ҡаршы: «Беҙгә элекке милләтселәр кәрәкмәй, беҙгә свежий милләтселәр кәрәк, һине сығарабыҙ», — тип, өйөнә ҡайтарып ебәрә. Ысынлап та, М. Буранғоловҡа бер килке ҡағылмай торалар. Ошо ваҡыт эсендә, бигерәк тә һуғыш йылдарында, ул ғәйәт актив һәм емешле ижади-ғилми эштәр менән шөғөлләнеп ала. 1940 йылда СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы итеп алына. 1944 йылдың 18 апрелендә Башҡортостандың халыҡ сәсәне исеме бирелә. Әммә ләкин, репрессияның көйләнгән машинаһын файҙаланып, Башҡортостанда башҡорт интеллигенцияһына ҡаршы аҫтыртын эш алып барыусы ҡара көстәр үҙҙәренең яуыз ниәтенә олғәшә. Алда әйтелгәнсә, ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1945 йылдың 27 ғинуарында ҡабул ителгән ҡарарында күренекле башҡорт яҙыусылары М. Буранғол менән Б. Бикбайҙың тарихи әҫәрҙәренә ҡарата ла милли сикләнгәнлектә ғәйеп ташлана. М. Буранғолдоң «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы буйынса яҙған драмаһы, хатта ул әҙерләп сығарған «Батырҙар тураһында эпос» йыйынтығы тарихты боҙоп күрһәтеүҙә ғәйепләнә. ВКП(б) Үҙәк Комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт тураһындағы 1946 йылғы билдәле ҡарарҙары был әҙиптәрҙең яҙмышын тағы ла ҡатмарландырып ебәрә. 1946 йылдың 25 октябрендә Башҡортостан Яҙыусылар союзының киңәйтелгән ултырышы М. Буранғолов менән Б. Бикбай ижадын махсус ҡарай һәм М. Буранғоловтың, йәнәһе, «бөтөн ижади эшмәкәрлеге осоронда идея яғынан тотанаҡлы бер генә әҫәр ҙә тыуҙыра алмауын, тарихи темаға яҙылған әҫәрҙәре патриархаль-феодаль ҡоролошто идеаллаштырыу һәм милләтселек рухында һуғарылғанлығын, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын милләтселек йүнәлешендә боҙоуын» билдәләй. Союз ағзалығынан сығарыу һәм БАССР Юғары Советы Президиумына әҙипте Башҡортостандың халыҡ сәсәне исеменән мәхрүм итеүҙе һорап



*Һурәттә һулдан уңға 4-се рәттә:* Нәжип Буранғолов, Зәкәриә Абитаев, Ғәббәс Дәүләтшин, Мөхәммәтша Буранғолов, Ғобәй Дәүләтшин, Сәхәү Дәүләтшин; *3-сө рәттә:* Нәҡҡәр Буранғолова-Фазылова, Фатима Дәүләтшина, Һәҙиә Дәүләтшинаның әсәһе — Гөлйәүһәр апай, Зәйнәп Буранғолова, Һәҙиә Дәүләтшина, Асия Мифтахова; *2-се рәттә:* Һиҙиәт — Һ. Дәүләтшинаның ҡустыһы; *1-се рәттә:* Хәмзә Ғәббәс улы Дәүләтшин, Әнүәр Ғәббәс улы Дәүләтшин, Зөфәр Мөхәммәтша улы Буранғолов

ҡарар ҡабул итә. СССР Яҙыусылар союзы секретариаты был ҡарарҙы шул ыңғайы ғына раҫламаһа ла, тора-бара дошмандары М. Буранғоловты Союздан ҡыуыу ғына түгел, оҙаҡ ваҡытҡа һоргөнгә оҙаттырыуға ла өлгәшә: 1950 йылда СССР Дәүләт именлеге министрлығы эргәһендәге Особый кәңәшмәнең ҡарары менән ул холоҡ төҙәтеү лагерына 10 йылға хөкөм ителә. 6 йылдан һуң, СССР Юғары Советы Президиумының 1955 йылдың 3 сентябре Указы нигеҙендә 1956 йылдың 12 майында азат ителеп, Башҡортостанға әйләнеп ҡайта. Әммә ғәҙелһеҙлек, шәхесте быуып тороу бының менән дә бөтмәй әле. М. Буранғоловҡа, ирекке сыҡҡан хәлдә лә, ысын ижад ирке менән йәшәү насип булмай. Архив документтарынан күренеүенсә, уға ғүмеренең һуңғы йылдарына тиклем үҙен-үҙе яҡлап, гражданлыҡ һәм яҙыусылыҡ хоҡуҡтары өсөн тиңһеҙ көрәш алып барырға тура килә. 1959 йылдың 31 октябрендә ҡабул ителгән

ҡарар менән М. Буранғоловтың Яҙыусылар союзы ағзаһы булыуын да, башҡорт халыҡ сәсәне исемен дә тергеҙәләр.

Бынан һуң да халыҡ сәсәненең яҙмышы үҙгәрешһеҙ ҡала: әҫәрҙәре баҫылмай, матбуғатта исеме генә булһа ла телгә алынмай, ата-бабаларҙың азатлыҡ көрәшен, рухи донъяһын сағылдырған пьесалары «коммунизм төҙөүсе» совет кешеләрен тәрбиәләү осон яраҡһыҙ булып сыға. Хатта М. Буранғолов тарафынан революцияға тиклем йыйылып, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырылған фольклор ҡомарткыларының тарихи ҡиммәте тәрлөсә шик аҫтына алына. Мөхәммәтша Буранғоловтың фольклор йыйыу эшмәкәрлегендәге иң ҙур ҡаҙанышы — башҡорт халҡының 1910 йылда уҡ (егерме ике генә йәшлек мөғәллим сағында) яҙып алынған «Урал батыр» исемле бөйөк эпосы 1968 йылда, халыҡ сәсәне үлгәндән һуң ғына, донъяға сығарыла. Йәнә шул фактты ла әйтеп үтмәйенсә булмай: етмеш һигеҙ йыл оҙон ғүмер кисереп, үҙенең бар булмышын туған халҡына хеҙмәт итеүгә арнаған әҙиптең үҙе иҫән саҡта бер генә юбилей датаһын да әҙәм рәтле билдәләп үтеү мөмкинлеге бирелмәй. Был, әлбиттә, законһыҙлыҡ хөкөм һөргән дәүерҙә Башҡортостанда бер Мөхәммәтша Буранғоловҡа йәки Рәми Ғариповҡа быуынына ғына түгел, бәлки, дөйөм алғанда, башҡорт милләтенә ҡарата ла аҫтыртын яуызлыҡ сәйәсәтенең бер күренеше ине.

Ниһайәт, донъя үҙгәрҙе, иҙелеп йәшәгән халыҡтарға ла демократия емештәрен аҙ ғына булһа ла татыу мөмкинлеге тыуҙы. Башҡорт халҡының торғонлоҡ йылдарында быуылып ятҡан рухи ихтыяры үҙенең киң ярҙарынан сығыу ынтылышы менән йәшәй башланы. М. Буранғоловтың тыуыуына 100 йыл тулыу көндәре, бәхеткә ҡаршы, шундай киң шарттарға тап килде. Башҡорт йәмәғәтселеге, Башҡортостан Яҙыусылар союзы һәм «Аҡ тирмә» башҡорт мәҙәниәт клубы 1988 йылдың декабрендә Өфөнөң Нефтселәр мәҙәниәт һарайында был датаны, рухи ҡаһарманлыҡ күрһәткән сәсән телле һәм оло аҡыллы халыҡ яҙыусыһына икһеҙсикһеҙ хөрмәт күрһәтеп, милли әҙәбиәтебеҙҙең һәм мәҙәниәтебеҙҙең ҙур байрам тантанаһы — юбилей кисәһе итеп үткәрҙе. Шулай уҡ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында Мөхәммәтша Буранғоловтың әҙәби ижадына арналған ғилми конференция уҙғарылды. Ошо конференцияның ҡарары буйынса, беренсе тапҡыр халыҡ сәсәненең ике томдан торған әҫәрҙәр һәм ғилми хеҙмәттәр баҫмаһы әҙерләнде. Пьесалары тупланған «Таштуғай» (1994), ғилми-тикшеренеү хеҙмәттәренән торған «Сәсән аманаты» (1995) исемле китаптары шулай донъя күрҙе.

Хәҙерге дәүерҙә М. Буранғолдоң «Башҡорт туйы», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Шәүрәкәй» кеүек классик драмалары яңынан башҡорт театрҙары сәхнәләренең түренән урын алды.

**Башҡорт фольклорын йыйыу һәм өйрәнеү өлкәһендәге хеҙмәттәре.** Мөхәммәтша Буранғолдоң күп яҡлы ғилми-фольклорсылыҡ, сәсәнлек һәм яҙыусылыҡ ижады халыҡ әҙәбиәтенән үҫеп сыҡҡан, ә иң яҡшы әҫәрҙәре башҡорттоң йөҙәрләгән, меңәрләгән йылдар буйы тупланып килгән рухи байлыҡтары, һоҡланғыс поэтик һүҙ сәнғәте менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Халыҡ сәсәне-

нең мираҫында, поэзия, драматургия, проза жанрҙарында һәйбәт өлгөләр менән бергә, фольклор йыйыу эшмәкәрлеге, башҡорт фольклорын өйрәнеүгә арналған тикшеренеүҙәре бик ҙур һәм гәйәт мөһим урында тора. Ғөмүмән, уның әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныуы һәм был өлкәлә тәүге аҙымдары халыҡ ижады әҫәрҙәренән башлана. «Мин, фольклорсы булараҡ, 1905 йылда фольклор материалдарын йыйырға тотондом», — тип яҙа ул 1962 йылда КПСС Үҙәк Комитетына яҙған бер хатында. 1907 йылда үҙе тыуып үҫкән Үрге Ильяс ауылында ул Хәсән Буранғоловтан «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» ҡобайырҙарын яҙып, бәғзе эпик әҫәрҙәрҙе иһә (мәҫәлән, «Алпамыша» эпосының бер вариантын) отоп алып, һуңынан ҡағыҙға төшөргән. 1907 йылдың йәйендә Аҡтүбәлә Фәтҡулла Зәбиров тигән кешенең тирмәнендә эшләгән сағында М. Буранғолов Алсынбай исемле ҡаҙаҡ аҡынынан ҡаҙаҡ телендә өләңдәр һәм башҡорт фольклоры ҡомартҡыһы «Ҡобағош сәсән» ҡобайырын яҙып ала. Шул уҡ йылда уның артабанғы яҙмышында хәл иткес роль уйнаған ваҡиға булып үтә. М. Буранғоловҡа Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы Иҙрис ауылында йәшәүсе атаҡлы ҡурайсы һәм ҡобайырсы Ғәбит Арғынбаев менән осрашыу насип була. Йөҙәрләгән эпик ҡомартҡыларҙы яттан һөйләгән һәм башҡорт халҡының сәсәнлек-импровизаторлыҡ традицияларын һаҡлап алып ҡалған данлыҡлы йырсы һәм ҡурайсы Ғәбит сәсән булаcаҡ фольклорсы ғалим, сәсән һәм әҙипте таң ҡалдыра, уның күңелендә халыҡ ижадына ҡарата тәрән һөйөү уята. М. Буранғолов сәсән вафат булғанға ҡәҙәр уның менән бер нисә тапҡыр осраша (Ғәбит Арғынбаев 1921 аслыҡ йылында, 65 йәшендә донъя ҡуя), ә 1910 йылда Ғәбит сәсәндән һәм шул уҡ Баймаҡ төбәгенең, Ирәндек буйҙарының Бәләкәй Этҡол ауылында йәшәүсе Хәмит сәсәндән донъя мәҙәниәте хазинаһында урын аласаҡ мәшһүр ҡомартҡы — **«Урал батыр»** эпосын яҙып ала. 1907—1920 йылдар эсендә Ғәбит сәсән М. Буранғоловҡа йәнә **«Ай Уралтау-Уралтау»**, **«Ете ырыу»**, **«Юлай менән Салауат»**, **«Байыҡ Айҙар сәсән»** һымаҡ ҡобайыр һәм эпостарҙы яҙҙыра. (Әйткәндәй, Ғәбит сәсән был осорҙа Ырымбурҙа, Ырымбур губернаһының Яҡуп ауылында, 1920 йылда Башҡортостандың шул саҡтағы мәркәзе Стәрлетамаҡта, йырсылар ярыштарында ҡатнашып, һәр ваҡыт беренсе урынға сыға.) М. Буранғолов йәнә аҡһаҡалдар ауыҙынан **«Ҡарас менән Аҡша»**, **«Ерәнсә сәсән»**, **«Мәргән менән Маянһылыу»**, **«Мәхмүт сәсәндең йомағы, уға үҙенең яуабы»**, **«Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне»** һ. б. эпик ҡомартҡыларҙы яҙып алып, килер быуындар өсөн һаҡлап ҡалдыра.

1908 йылда М. Буранғолов күренекле шәреҡсе ғалим һәм яҙыусы, «Шура» журналының мөхәррире Ризаитдин Фәхретдиновҡа халыҡ араһынан яҙып алған ҡомартҡыларын күрһәтә. Үҙе лә халыҡ хәтерен юғары баһалаған, башҡорт фольклоры өлгөләрен баҫтырып сығарыуға ҙур әһәмиәт биргән Р. Фәхретдинов йәш ҡәләмдәшенең эшен хуплап ҡаршы ала, *«башҡорт халҡының тарихын ҡәбергә индермәй килеүселәр шундай кешеләр генә буласаҡ»*, тип, М. Буранғоловтың изге эшмәкәрлегенә фатихаһын бирә.

Фольклор әҫәрҙәрен йыйыу, өйрәнеү, баҫып сығарырға әҙерләү, ғилми

эштәр яҙыу мәшһүр әҙип һәм сәсәншағир булып танылғас та, исеме һәм ижады тыйылып торған осорҙа ла туҡталмай. Фольклорсыларҙың баһалауынса, 1910 йылда, 22 йәшлек егет сағында «Урал батыр» эпосын яҙып алып, башҡорт һәм донъя мәҙәниәте өсөн һаҡлап алып ҡалыуы менән генә лә М. Буранғолов исеме мәңгелек хөрмәткә лайыҡ. Әммә, бынан тыш, нисәмә эпик ҡомартҡыларҙы, тарихи йырҙар һәм легендаларҙы үҙ ваҡытында ҡағыҙға теркәп, сәсәндәр ижадын, башҡорттоң йолаларын өйрәнеп, туған халҡы алдында баһалап бөткөһөҙ хеҙмәт күрһәтә әҙип. «Шура», «Башҡорт аймағы», «Сәсән», «Октябрь» журналдарында, «Башҡортостан» («Ҡыҙыл Башҡортостан», «Совет Башҡортостаны») гәзитендә ул мәҡәләләр, халыҡ араһынан йыйып алған фольклор өлгөләрен баҫтырып сығара. 1922—1928 йылдарҙа Башҡортостан Шуралар йомһүриәте Мәғариф комиссариаты янындағы Ғилми үә тарихи ойошманың ағзаһы булараҡ та был эш менән ул әүҙем шөғөлләнә, 1938 йылда Өфөгә күсеп килеп, Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй башлағанда ул инде үҙ халҡының тарихын, этнографияһын, йолаларын, фольклор байлыҡтарын әнәһенән ебенәсә тигәндәй тәрән белеүсе ҙур абруйлы шәхес һанала. Ниһайәт, ул үҫмер сағынан йыйып, һаҡлап килгән ҡиммәтле материалдарҙы ентекләп өйрәнеү, системаға һалыу, баҫтырып сығарыу өсөн әҙерләү эшенә ең һыҙғанып тотона. Матбуғат биттәрендә «Аҡбуҙат», «Мәргән менән Маянһылыу», «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат» эпостарын баҫтырып, халыҡҡа еткереү сараһын күрә. 1943 йылда был ҡомартҡылар «Батырҙар тураһында эпос» тигән исем менән йыйынтыҡ итеп донъяға сығарыла.

М. Буранғолов, башҡорт фольклорсыларынан иң беренселәр рәтендә, халыҡ ижадын ғилми өйрәнеүҙе башлап ебәрә. Ошо йылдарҙа ул сәсәндәр, ҡурайсылар ижадын, башҡорт фольклорының поэтик жанрҙарын өйрәнеү буйынса мөһим эштәр башҡара, «Башҡорт тарихи йырҙары», «Башҡорт тарихи йырҙары һәм легендалары», «Башҡорт халыҡ поэзияһы» тигән хеҙмәттәр яҙа. «Башҡорт туй йолалары» исемле фольклор-этнографик характерҙағы уникаль монографияһын тамамлай. Уның был тикшеренеүҙәре, үкенескә ҡаршы, ярты быуат үткәндән һуң ғына әҙиптең әҫәрҙәр томында баҫырға әҙерләнде. Ул йыйған фольклор хазиналары 1977 йылда Мәскәүҙә «Наука» нәшриәтендә башҡорт һәм урыҫ телдәрендә донъя күргән «Башҡорт халыҡ эпосы» тигән томдың төп йөкмәткеһен билдәләне, 70—80-се йылдарҙа баҫылған 18 томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығында ҙур урын алды. Башҡорт халыҡ героик эпосының донъя күләмендә танылыуы менән беҙ иң элек М. Буранғолов эшмәкәрлегенә бурыслыбыҙ.

**Мөхәммәтша Буранғоловтың сәсәнлек ижады. Проза һәм публицистик әҫәрҙәре.** «Башҡорт халыҡ поэзияһы» тигән хеҙмәтендә М. Буранғоловтың ошондай фәһемле һүҙҙәре бар: «Халыҡ сәсәндәре, хәҙерге тел менән әйткәндә, үҙ осоронда халыҡтың тормошон сағылдырған, халыҡ дошмандарын асып биргән ваҡытлы матбуғаты ла, иҙеүсе синыфҡа ҡаршы көрәшкә өндәүсе ағитатор-шағиры ла, уҙғандарын һөйләүсе тарих-

сы ла улар». Был һүҙҙәрҙе ул үҙенең бай һәм күп яҡлы художество әҫәрҙәре менән дә тулыһынса аҡланы, яңы дәүер башҡорт әҙәбиәте тарихында халыҡтың айырыуса оло хөрмәтен һәм саф мөхәббәтен яулаған ҡаһарман рухлы атаҡлы шәхес, ысын халыҡ яҙыусыһы, халыҡ сәсәне булараҡ урын алды. Уның әҙәби мираҫында киң ҡоласлы поэтик әҫәрҙәр — бары тик сәсәндәр ижадына ғына хас ҡобайырҙар ҙа, халыҡ эпостары буйынса яҙылған либреттолар ҙа бар.

М. Буранғолдоң ижади мираҫында киң ҡоласлы поэтик әҫәрҙәрҙән бигерәк тә «Ватан һуғышы» исемле ҡобайыры ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Бында башҡорт яугирҙарының 1812 йылда Рәсәйҙе яҡлауҙа күрһәткән тиңһеҙ батырлыҡтары саф ҡобайыр алымдары менән тасуирлана. Сюжетты ойоштороусы топ персонаж — халыҡты азатлыҡ яуына күтәргән атаҡлы ҡурайсы һәм йырсы Байыҡ сәсән. Әҫәрҙә халыҡ батырлығы, полководец Кутузов, уның уң ҡанаты — башҡорт ғәскәр башлығы Ҡаһым түрә данлана.

*Ҡыҙарып таң атҡанда,*
*Дошман яуы ҡалҡҡанда,*
*Ҡотоҙ үҙе — һул яҡтан,*
*Тыуға сөйгән ҡыйғырҙай,*
*Һоро атын уйнатып,*
*Йылғыр нәжәгәй утындай*
*Булат ҡылыс ялтлатып,*
*Ҡаһым түрә уң яҡтан*
*Дошманға яу асты, ти;*
*Ҡуйға ингән бүреләй,*
*Дошман яуын ҡырҙы, ти.*

Ҡобайырҙа Йәнтүрә исемле башҡорт һәм уның ҡыйыу йөрәкле сая ҡатыны Аҫылбикә тураһындағы легенда мотивтары ла оҫта файҙаланыла. Ваҡиғалар башҡорт уҙамандарының Ҡаһым түрә етәкселегендә Парижға барып кереүе, Наполеондың ҡәлғәне ташлап ҡасыуы, иҫән ҡалған дошмандың ҡылысын ергә һалыуы, «янаралы, һанаты, икмәк-тоҙон ҡулға алып, яуҙы ҡаршы алыуы» менән тамамлана. Шул айҡанлы:

*Бар яу менән ҡашҡалар*
*Парижда, ҙур һараиҙа,*
*Мәскәүҙә, бар ҡалала,*
*Уралда — бар далала,*
*Бөтөн халыҡ берлектә,*
*Ҡатын-ҡыҙы, балаһы,*
*Ҡарт ҡороһо — барыһы,*
*Йыр сығарып сәсәндәр,*
*Еңеү туйын итте, ти.*

Әҫәр Бөйөк Ватан һуғышының хәл иткес осоронда — 1942 йылда айырым китап булып баҫылып сыға һәм, әлбиттә, халыҡта ватансылыҡ тойғоһо, илһөйәрлек рухы тәрбиәләүҙә әһәмиәтле роль уйнай.

Халыҡ сәсәненең йәнә «Закон тураһында ҡобайыр», «Бөйөк дуҫлыҡ тураһында ҡобайыр», 1964 йылда 75 йәше тулғанда яҙған «Рәхмәт хаты» һымаҡ күләмле поэтик әҫәрҙәре бар.

М. Буранғолдоң ижади мираҫында проза әҫәрҙәре лә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. 1928 һәм 1929 йылда уның «Сәсән» журналы биттәрендә «Айһылыу» һәм «Көтөлмәгән осрашыу» тигән хикәйәләре баҫыла. Әҙиптең, халыҡ йыры риүәйәтенә нигеҙләнеп, «Таштуғай» тигән хикәйә яҙғанлығы ла билдәле.

Өфөлә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Фәнни архивында әҙиптең улы Нәжип Буранғолов тапшырған материалдар араһында «Сәлимә» тигән повесы һаҡланып ҡалған. Был повесты М. Буранғолов ғүмеренең һуңғы йылдарында ижад иткән. Әҫәр автобио-

график характерҙа. Уның үҙәгенә Сәлимә исемле башҡорт ҡыҙының яҙмышы ҡуйылған.

Ижад юлының башында уҡ әле Мөхәммәтша Буранғол, башҡорт яҙмышының көнүҙәк проблемаларына мөрәжәғәт итеп, матбуғат биттәрендә публицистик мәҡәләләр менән сығыш яһай. 1914 йылда «Ваҡыт» гәзитендә һәм шул уҡ йылдың октябрь айында «Шура» журналында (1914, № 19) баҫылып сыҡҡан тәүге мәҡәләһен «Башҡорт ерҙәренең ситтәргә китеүе һәм уның нәтижәләре» тип атай. Бында, исеменән үк күренеүенсә, башҡорт халҡының тарихында күп дәүерҙәр буйы бик мөһим роль уйнаған һәм хәҙерге заман өсөн дә актуаль яңғыраған ер мәсьәләһе күтәрелә. Үҙенең яҡташтары — Туҡ-Соран буйы башҡорттары тормошо миҫалында автор халыҡтың ҡулынан ата-бабалар биләгән ерҙәрҙең күпләп китеүен милләттәштәребеҙҙең көнкүрешендә, социаль хәлендә бик ауыр һөҙөмтәләргә килтереүсе фактор тип күрһәтә.

«Ваҡыт» гәзитендә «Соран үә Туҡ буйы башҡорттары» тигән икенсе мәҡәләһендә лә Бурангол үҙ яҡташтарының тормошо, көнкүреше, һөнәр-кәсептәре тураһында һөйләй, шул уҡ ер мәсьәләләренә туҡталып үтә. «Хәҙерге көндә, — ти ул, — ошо ике һыу буйында ултырған башҡорттарҙың иң тырышып иткән кәсептәре иген сәсеү булып тора. Арала йөҙ-йөҙ илле дисәтинә иген сәскән байҙар бар. Улары үҙ ерҙәрен ситтәргә бирмәйҙәр, хатта фәҡир ҡарындаштарының ерҙәрен ҡортомға алып торалар». Мәҡәләлә ер өсөн түләнә торған һалымдың ярлылар өсөн ифрат ауыр булыуы, шул сәбәпле һалымды түләй алмағанлыҡтан, уларҙың үҙ ерҙәрен арзан хаҡҡа һатып ебәреүҙәре йәки ҡортомға биреүҙәре һәм һөҙөмтәлә ауылдарҙа күҙгә күренеп фәҡирлектең көсәйеүе тураһында автор әсенеп һәм борсолоп яҙа.

Мөхәммәтша Буранғолдоң, халыҡ ижады ҡомартҡыларын яҙып алып, аңлатмалар биреп, баҫтырып сығарыу эшенә тотоноп китеүен дә шул уҡ матбуғат һүҙенә, публицистикаға ынтылыш менән аңлатып була торғандыр. 1918 йылдың 8 мартында «Яңы ваҡыт» гәзитендә баҫылған «Башҡорт туғандарға» тигән мөрәжәғәт иһә — әҙиптең ижади мираҫында сәйәси публицистиканың бер өлгөһө.

**Мөхәммәтша Буранғол — драматург. «Ашҡаҙар» драмаһы.**

Драматургия — М. Буранголдоң айырыуса мауығып, ысын-ысынында ҡолас кирип эшләгән жанрҙарҙың береһе. Ул башҡорт драматургияһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе булды, был өлкәлә бөтөн ғүмере буйы илһамланып ижад итте. Драма әҫәрҙәре лә М. Буранголдоң сәсәнлек ижады, фольклор менән тығыҙ бәйле. Күпселек драмаларына ул башҡорт халҡының киң билдәле тарихи йырҙарын һәм эпик әҫәрҙәрен нигеҙ итеп алған. Өҫтәүенә, был драма әҫәрҙәре торғаны менән сәсән-шағир ижадының бары тик икенсе жанр ерлегендәге дауамы, ысын мәғәнәһендә халыҡсан поэтика күренеше. Фольклорсылыҡ һәм проза өлкәһендәге тәүге аҙымдарын да М. Буранголов башҡорт йыр тарихтарын пропагандалау ниәте менән яһай.

1915 йылда М. Буранғол «Шура» журналы биттәрендә атаҡлы башҡорт халыҡ йыры «Ашҡаҙар»ҙың легендаһын баҫтырып сығара. Үҙе хәбәр итеүенсә, башҡорттарҙа киң таралған был хикәйәттең ҡулдан

яҙылған ғәйәт тулы вариантына юлыға. Был хаҡта ул ошондай аңлатма бирә: «Халыҡ араһында мәшһүр Ғүмәр ахундың ҡулъяҙма бер ҡалын мәжмәгендә[1] Тимерғәли исемле бер башҡорттоң Ашҡаҙар ваҡиғаһы хаҡында һөйләгәндәре һәм йырлағандары яҙылған. Ошо хикәйә матбуғатҡа башҡорт ауыҙынан сыҡҡан рәүеше менән кереп ҡалһын тип, «Шура»ға яҙамын». Ошондай аңлатманан һуң журналда ҡулъяҙма ҡомартҡының тексы баҫыла.

Аҙаҡ ошо легенда нигеҙендә 1917 йылда «Ашҡаҙар» исемле сәхнә әҫәре ижад итә. Пьеса 1918 йылдың 4 апрелендә сәхнәгә ҡуйыла, 1923 йылда айырым китап булып баҫылып сыға. 1919 йылда профессиональ башҡорт театры ойошторолғандан башлап күп йылдар буйы был спектакль уның репертуарында ныҡлы урын ала, халыҡтың яратҡан тамашаһына әйләнә.

«Ашҡаҙар» йыры һәм уның легендаһы буйынса шул ярашы мәғлүм: бер-береһен яратышып өйләнешкән егет менән ҡыҙ котмәгәндә бәхетһеҙлеккә тарый — һунарға сыҡҡан йәш ир Ашҡаҙарға батып һәләк була. Уның иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн кәләше уға бағышлап йыр сығара. Халыҡта йырҙың ижад ителеүе хаҡында былай тиелә: йәш ҡатын, ире вафат булғас, башҡорт ҡыҙҙары араһындағы барлыҡ йырсы ҡыҙҙарҙы саҡырып, һөйгән йәре иҫтәлегенә моңло бер көй сығарыуҙарын үтенә. Ләкин ҡыҙҙар күпме генә көйләп ҡараһалар ҙа, күңелгә ятырлыҡ булмай. Шул саҡ тол ҡалған ҡатын үҙе өр-яңы бер көйгә хәҙерге «Ашҡаҙар» йырын йырлап ебәргән, ти. Йыйылған йырсы ҡыҙҙар, барыһы бер булып, ошо йырҙы хуплаған. «Ашҡаҙар» йырының киң билдәле бер строфаһын иҫкә төшороп үтәйек:

*Йәнкәй-иәнәш китте, ай, һунарға,*
*Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә.*
*Э-эй... Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә.*
*Шәшкеләргә китеп вафат булды,*
*Башҡынайым ҡалды йәш кенә.*
*Э-эй... Башҡынайым ҡалды йәш кенә.*

Йыр легендаһының йөкмәткеһе әҫәрҙең финалында ҡыҫҡа ғына ике шаршауҙың сюжет һыҙығын билдәләй. Унда Йомағолдоң ауға сығып китеүе, аҙмы-күпме ваҡыт үтеүгә ата йортона ҡайғылы хәбәр килеүе әйтелә. Автор иҫтәлеккә йыр сығарыу мәжлесенә бигүк туҡталып тормай, был эпизод Таңһылыуҙы йыуатыу, ҡайғыһын уртаҡлашыу өсөн йыр йырлау формаһында ғына бирелә. Таңһылыу шул саҡ Ашҡаҙар йылғаһының исеме менән үҙенең йырын йырлап ишеттерә. Эпилог урынына Таңһылыуҙың «Ашҡаҙар» көйөнә йырлап, бер йәшлек сабыйы Арыҫлан менән илап-һыҡтап хушлашыуы, иренең ҡәбере янында аҡылдан яҙыр хәлгә етеп, һушһыҙ йығылыуы күрһәтелә.

Барлығы 5 шаршауҙан, 6 күренештән торған пьесаның бынан алдағы топ олоштәре халыҡтың тормошкөнкүрешен, гороф-ғәҙәттәрен, ҡыҙ әйттереү һәм туй йолаларын сағылдырыуға арнала. Әҫәр Ашҡаҙар буйында йәштәрҙең еләк йыйып, ҡымыҙ эсеп, йырҙар йырлап күңел асыу күренеше менән башлана. Артабан Йомағол менән Таңһылыуҙың йыр, ҡурай моңо аша аңлашыу картинаһы тотош бер күренеш булараҡ тасуир ителә. Яусылау, кейәү егете йортонда ҡалым биреү (ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы ҡунаҡ итеү), туй үткәреү, шул ва-

[1] *Мәжмәғ* (ғәр.) — йыйынтыҡ.

ҡытта мәһәр һалыу, мал инселәү һымаҡ йолаларҙы атҡарыу пьесаның сюжет үҫешен, геройҙарҙың (егет менән ҡыҙҙың) яҙмышына изге теләктә булыуҙы белдереүсе мөһим ваҡиға рәүешендә һүрәтләнә.

«Ашҡаҙар» пьесаһы М. Буранғол ижадын һәм, ғөмүмән, башҡорт драматургияһының фольклор-этнографик йүнәлештәге үҫеш юлын башлап ебәреүсе әҫәрҙәр рәтендә тора. М. Буранғолдоң үҙенең артабанғы йылдарҙа ижад ителгән драмаларының күпселеге («Башҡорт туйы», «Ялан Йәркәй», «Шәүрәкәй», «Буранбай», «Зәңгәр шәл» һ. б.), Х. Ғәбитовтың «Ынйыҡай менән Юлдыҡай», Х. Ибраһимовтың «Талир тәңкә», «Балдыҙым» пьесалары — ошо йүнәлештәге драма әҫәрҙәре.

Борондан йыр-бейеүгә, ҡурай, ҡумыҙ йә иһә думбыра моңона айырыуса әүәҫ, тормошта, көнкүрештә үҙенең әҙәп һәм йолаларын, традицияларын, ысын булмышын һәм үҙаңын һаҡлап йәшәгән башҡорттоң тәүге сәхнә әҫәрҙәре фольклорға, этнографияға, йәғни халыҡтың милли асылына, эстетик зауығына яҡын булыуы тәбиғи күренеш ине. Шуның өсөн дә, әгәр ҙә әҫәр оло талант утында ҡайнап сыҡҡан икән, кеше һәм ил яҙмыштарын әҙип үҙенең йөрәк ялҡындары аша яҡтыртыуға өлгәшкән икән, бындай әҫәрҙәр яңы дәүерҙәрҙә, яңы замандарҙа ла тамашасы күңелен яулап алыу көсөнә эйә.

Был хәҡиҡәтте беҙ ошо уҡ «Ашҡаҙар» драмаһының төп геройҙары — Таңһылыу менән Йомағол образдарында күрәбеҙ. Был ике йәш йөрәктең бер-береһенә ҡайнар һәм саф мөхәббәте һәр кемдә ысынлап та һоҡланыу тыуҙырырлыҡ. Улар күптән инде осрашып, аңлашып, хатта һүҙ беркетеп тә ҡуйғандар. Әйткәндәй, пьесала егет менән ҡыҙҙың көтөп алынған осрашыу сәғәттәрендә ҡапма-ҡаршы йыр йырлап, борсолоп та, һағышланып та, өҙөлөп яратыу тойғоларын белдереп тә әйткән һүҙҙәре аша белдерелгән үҙ-ара аңлашыу картиналары әҫәргә романтик төҫ бирә. Сәхнәгә сыҡҡанда Йомағол ҡурайҙа нәҡ һөйгәне белгән көйҙө тарта. Бына Йомағол, һыуға барған ерендә ҡыҙҙы яңынан осратып, ниһайәт, үҙенең изге ниәтен әйтеп бирә:

*Ашҡаҙарҡай буйы, һай, ҡулдәр (ҙәй),*
*Кәмәләргә ултырып китергә,*
*А-ай.., кәмәләргә ултырып китергә.*
*Хаҡ тәғәлә беҙгә ҡушҡан икән*
*Бергә-бергә ғүмер итергә,*
*А-ай.., бергә-бергә ғүмер итергә.*

Ҡыҙ ҙа, риза булыуын белдереп, һис бер йәшереп тормайынса, эс серҙәрен сисеп, тураһын әйтеп бирә:

*Ебәрһәнә, йәнем, беләгемдән,*
*Һыуым түгелә сайҡалып күнәктән,*
*А-ай.., һыуым түгелә сайҡалып*
*күнәктән.*
*Ғишыҡ уты ҡабынып, хәлем бөттө,*
*Хәҙер алды инде лә йөрәктән,*
*А-ай.., хәҙер алды инде лә йөрәктән.*

Пьесала Йомағол менән Таңһылыу, Таңһылыуҙың иптәш ҡыҙҙары Дәүләтбикә, Айбикә, Һандуғас (исемдәре генә лә ниндәй аҫыл бит әле) ҡылыҡ-фиғелдәре, бер-береһенә ихлас мөнәсәбәте, намыҫлы һәм итәғәтле булыуҙары менән иғтибарҙы йәлеп итә, был геройҙар һәм персонаждар хаҡлы рәүештә боронғо башҡорт йәштәренең типик вәкилдәре булып күҙ алдына килә. Бәхеткә күрә, өлкәндәр ҙә йәштәрҙең мөхәббәт тойғоларына ҡаршы тошмәйҙәр, Таңһылыуҙың атаһы Сәфәрғәли, әсә кешенең, малға ҡыҙығып, Сәлим

кантонға көндәш өҫтөнә биреп ебәреү яғында тороуына ҡарамаҫтан, ҡыҙын үҙ тиңенә йәрәштереүҙе хуп күрә. «Ай хоҙайым, мине шул Йомағолға ҡушырһыңмы икән?.. Атайым да, әсәйем дә мине Йомағолға бирмәһәләр, минең бөтөн ғүмерем һулыған сәскә кеүек һарғаясаҡ», — тип, килгән яусыларға нимә тип яуап бирерҙәрен ут йотоп көтөп йөрөгән Таңһылыуҙың теләктәре юш килә. Бына тиҙҙән Йомағолдоң атаһы ҡыҙ алыу, ҡоҙалашыу хөрмәтенә үҙенең тирмәһендә ҡалым бирә, күркәм ҡымыҙ мәжлесе үткәрә. Бер-береһен өҙөлөп яратып өйләнешкән егет менән ҡыҙ матур ғаилә ҡороп йәшәй башлайҙар. Һәр бер быуын йәштәре өсөн һоҡланырлыҡ та, үҙенсә бер идеал да булырлыҡ был татыу ғаилә тормошо.

Әммә, ни хәл итмәк кәрәк, бәлә ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй тигән әйтем дә ҡалған да баһа боронғоларҙан. Берҙән-бер көндө, һунарға сыҡҡан сағында, Ашҡаҙарҙа боҙ уйылып, Йомағол боҙ аҫтына китеп һәләк була. Дөрөҫ, әҫәрҙә Йомағолдоң фажиғәле үлемендә уны дошман күреп йөрөгән кешеләрҙең ҡатнашы юҡмы икән тигәнерәк шик тә белдереп ҡуйыла. Әсәһе Ынйыбикәнең: «Балам, кемдәр менән сығаһың?» — тигән һорауына ул: «Теге ауылдан Ирназарҙар менән сығырға һөйләшкәйнек, сығырҙармы, юҡмы? Үҙебеҙҙең ауылдан бөгөн берәү ҙә сыҡмай шикелле», — тип яуап бирә. Әсәһе шул саҡ: «Шул дошман Ирназарҙар менән ни эшләп йөрөйһөң инде? Сәлим кантун әллә ни эшләтеп ҡуйыр әле», — тип хафалана. Әммә артабан автор, пьесаға нигеҙ итеп алынған йыр һәм легенданың логикаһына тоғро ҡалып булһа кәрәк, был шик-шөбһәне ҡабат ҡу-

йыртмай. Шул ваҡытта, нәҡ йыр тарихындағыса, «шәшкеләргә китеп, вафат булған» Йомағол иҫтәлегенә көй сығарыу ваҡиғаһы менән бәйле рәүештә, Таңһылыуҙың ҡайғы-һағыштары, йөрәк өҙгөс, йән тетрәткес хәсрәтләнеүҙәре күрһәтелә. Пьесала көй сығарыу өсөн саҡырылған йырсы ҡатын-ҡыҙҙар, Таңһылыуҙың артынса, Йомағолдоң ҡәбере янына йыйыла, тол ҡатынды йыуатып, йыр йырлайҙар. Таңһылыу ҡайһыһын ератһа, шул көйҙө Йомағол көйө тип атамаҡсылар. Шул саҡ, асырғанып, һағышланып, илап-һыҡтап: «Мине мәңгелек йөрәгемдән айырып, толмәхрүм ҡалдырған, бер йәшлек баламды етем иткән, ҡарт ҡәйнәмде үкһеҙ иткән, ...минең башыма ҡайғы булған Ашҡаҙар йылғаһының исеме менән үҙемдең көйөмә «Ашҡаҙар» тип исем ҡушам. Бынан һуң «Ашҡаҙар» йырын ишетһәгеҙ, ошо йәнемдең аһынан, бер егеттең йәш гүмеренән һыҡрап сыҡҡан бер моң-көй, йыр икән тиерһегеҙ, беҙҙе иҫкә төшөрөрһөгөҙ», — тип, Таңһылыу үҙе ошо йырҙы йырлай:

*Ашҡаҙарҡай буйы ай йомро юл,*
*Ат аяҡҡайҙары менән ҡаҙылған,*
*А-ай... ат аяҡҡайҙары менән*
*ҡаҙылған.*
*Беҙҙең дә генә үкһеҙ ҡалыуыбыҙ,*
*Тәҡдирҙәрҙә шулай яҙылған,*
*А-ай... тәҡдирҙәрҙә шулай яҙылған.*

Был үтә тәьҫирле эпизод халыҡта йәшәгән йыр тарихына ауаздаш, күҙ алдында мәңгелек мөхәббәт һәм ҡайғы-һағыш менән һуғарылған илаһи бер йырҙың тыуыуы күңелдәрҙе арбау көсөнә эйә. Әммә шуны ла әйтмәйенсә булмай: пьесаның финалында, Таңһылыуҙың, түҙемлектең сигенән сығып, һаташыу, аҡылдан яҙыу хәленә етеүе, мәрхүм иренең

исемен әйтеп: «Ҡалған һандуғас кеүек балаң менән мине ал. Ал!.. Йомағолом, ал!» — тип сабырһыҙланыуы, хатта:

*Бирһәнә лә, ағай, ҡурайыңды,*
*Ашҡаҙарҡай көйөн дә тартайым.*
*Алһа ла ғына хоҙай йәндәремде,*
*Ҡара гүргә мин дә ҡайтайым, —*

тип йырлауы халыҡ күңелендәге оло рухлы, ауыр ҡайғыны еңеп, үҙендә һөйгән кешеһенең исемен мәңгеләштерерлек ихтыяр көсө тапҡан һөҡлангыс башҡорт ҡатыны хаҡындағы идеалға һис кенә лә тап килмәй. Был хәлде авторҙың, сәхнә талаптары менән мауығып, трагизм элементтарын саманан тыш аштырып ебәреүе менән аңлатып була торғандыр. Шулай уҡ был пьеса М. Буранғолдоң тәүге сәхнә әҫәре, йәғни был жанрҙа асылда тәүге тәжрибәһе булғанлығын да иҫәпкә алырға кәрәк.

«Ашҡаҙар» пьесаһы, дөйөм алғанда, милли драматургиябыҙ үҫешенең башланғыс осорон билдәләүсе һәм ысын-ысынында халыҡсан әҫәр булыуы менән әһәмиәт ҡаҙана. Уның, алда әйтелгәнсә, башҡорт әҙәбиәтендә һәм М. Буранғолдоң үҙ ижадында фольклор-этнографик характерҙағы пьесаларҙы башлап ебәреүе, драманың үҙ ваҡытында сәхнәлә ҙур уңыш менән барыуы әҙәбиәтебеҙ тарихында мөһим күренеш булараҡ урын ала.

**«Башҡорт туйы» драмаһы һәм башҡа әҫәрҙәре.** «Ашҡаҙар»ҙан һуң М. Буранғол бер-бер артлы ун ике пьеса: «Зәңгәр шәл» (1918), «Буранбай» (1920), «Тәфтиләү» (1921), «Йәшерен йөҙҙәр» (1921—1934), «Алпамыша» (1922), «Сәлим кантун» (1923), «Ялан Йәркәй» (1923—1926), «Ҡара юрға» (1924), «Шәүрәкәй» (1925—1948), «Әбйәлилдәр шайкаһы» (1926—1929), «Мөфти ҡыҙы Фатима» (1926), «Ирек көрәше» (1927) һәм, ниһайәт, атаҡлы «Башҡорт туйы» (1926—1943) драмаларын ижад итә. Йылдар үтеү менән «Шәүрәкәй», «Башҡорт туйы» һымаҡ әҫәрҙәренә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтып, яңы варианттары өҫтөндә эшләй. 30—40-сы, шулай уҡ 50-се йылдарҙа драматург йәнә «Прокурор», «Гөлсәсәк» («Башҡорт туйы»ның варианты), «Ҡараһаҡал», «Таштуғай», «Котоусе», «Берлек», «Осрашыуҙар», «Өлгө», «Яңы тормошта — яңы кешеләр», «Наҙлы ҡыҙ» («Ҡыҙыл таш»), «Гөлнур» исемле төрлө тематикаға ҡараған пьесаларын, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тарихи трагедияһын, «Мәргән», «Туҡтар менән Гөлнур» опера либреттоларын, «Таштуғай» драмаһын яҙа. Үкенескә ҡаршы, был әҫәрҙәрҙең бик күбеһе, ҡулъяҙма хәлендә генә ҡалғанлыҡтан, беҙҙең заманға килеп етмәгән. Ҡайһы бер пьесаларының үҙ ваҡытында бөтән авторҙар тарафынан үҙләштерелеүе тураһында ла мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, 1918 йылда яҙған «Зәңгәр шәл» пьесаһының ҡулъяҙмаһын ул Ҡазан театры директоры Ғ. Ҡарыевҡа тапшырған була. Әҫәр шул көйөнсә авторға кире ҡайтарылмай ҡала.

Халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғолдоң илһам сығанағы ла, шатлығы һәм ҡайғыһы ла — халыҡ тормошо, халыҡ тарихы, уның йырмоңдарҙа, тарихи легендаларҙа, героик эпостарында кәүҙәләнгән рухи донъяһы. Ғәжәп хәл: нәҡ тотош Рәсәйҙә барған социаль катаклизмдар, синфи көрәш һәм бәрелештәр осоронда — 1917 йылда тәүге пьесаһын яҙып, унан һуңғы тәүге ун йыллыҡта

ғәйәт ҙур драматург булып формалашҡан М. Буранғол ғәжәйеп бер интуицыя менән әҙмә-әҙлекле тарихи, этнографик сюжеттарға иғтибар итә, донъяны бай һәм ярлыға, аҡ һәм ҡараға ғына бүлеү менән алданмайынса, халыҡ ижады әҫәрҙәренән иң әүәл ысын рухи ҡиммәттәрҙе, йөрәктәрҙе тетрәтерлек ваҡиғаларҙы, кеше һәм халыҡ бәхете өсөн йән аямай көрәшеүсе ҡаһарман шәхестәрҙе эҙләп таба. «Ашҡаҙар»ҙа был, белеүебеҙсә, йәш кенә ир менән ҡатындың фажиғәле яҙмышы, йәғни һөйгән йәре «Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә» китеп вафат булғандан һуң йәш көйөнсә тол ҡалған ҡатындың үҙ иренә арнап йыр сығарыу ваҡиғаһы. Үҙенең йөкмәткеһе, конфликты менән ҡатмарлыраҡ та, ҡаршылыҡлыраҡ та «Шәүрәкәй» драмаһында ла фәҡәт синфи ҡапма-ҡаршылыҡ йә булмаһа бүтән төрлө идеологик доғмалар түгел, бәлки саф мөхәббәт, ысын кешелек мөнәсәбәттәре, ҡатын-ҡыҙ азатлығы, ниһайәт, әҙәм балаларының ерҙә үҙ бәхеттәре өсөн көрәше, йәғни кешелек сифаттары алғы планға сыға. Хатта Башҡортостанда уҙған дәүерҙәрҙә милли-колониаль тәртиптәргә ҡаршы көрәшеүсе данлыҡлы йырсы һәм ҡурайсы Буранбай-Йәркәй яҙмышы менән бәйле, башҡорттарҙың моңло «Ялан Йәркәй», «Ҡара урман», «Бөҙрә тал» исемле көй-йырҙарынан алып яҙылған «Ялан Йәркәй» драмаһында ла М. Буранғол, тарихи ысынбарлыҡҡа, тормош күренештәренә социаль анализ яһауҙы маҡсат итмәй, төп иғтибарын аяныс хәлдәрҙе драматургик формала сағылдырыуға ғына йүнәлтә. Уның өсөн фольклор ерлеген һәм сығанаҡтарҙы боҙмау, уның демократик, гуманистик рухын һаҡлау ҙурыраҡ әһәмиәткә эйә.

Был йәһәттән М. Буранғол ижадында ғына түгел, бәлки, ғөмүмән, башҡорт театр сәнғәте һәм драматургияһы тарихында айырыуса характерлы әҫәрҙәрҙең береһе — «Башҡорт туйы» музыкаль драмаһы. Тәү башлап 1926 йылда Өфө театр техникумы уҡыусылары тарафынан ҡуйылған был драманы тиҙҙән режиссер Вәлиулла Мортазин, бер аҙ төҙәтмәләр индереп, Башҡорт дәүләт драма театрында сәхнәләштерә. Спектакль ҙур һәм шаулы уңыш ҡаҙана, күп йылдар буйы сәхнәнән төшмәй. «Башҡорт туйы» ысын мәғәнәһендә халыҡ драмаһына әйләнә, тамаша барғанда театрҙа һәр саҡ зал шығырым тулы була. «Халыҡ уны алҡышлап ҡаршы ала, алҡышлап оҙата. Айырыуса йәштәр, студенттар ябырылып ҡарай ине», — тип хәтерләй был хаҡта Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева.

«Башҡорт туйы» шулай уҡ тулыһынса фольклор материалдарынан, халҡыбыҙҙың туй йолаларынан килгән күтәренке рухлы, тәрән мәғәнәләр һәм кинәйәләр менән һуғарылған, йор һүҙ, уйын-көлкө, йыр-моң менән тулы тормошсан һәм ғәйәт үткер конкүреш драмаһы. Пьесаның конфликты ла, унда барған ваҡиғалар ҙа башҡорттоң йола ҡанундары һәм туй барышында йола ҡушҡанды үтәү зарурлығы менән билдәләнә. Бай ҡыҙы Гөлзифаны (ҡайһы бер варианттарҙа — Голғәйшә) кейәүгә бирмәкселәр. Әммә уның бала сағында, нәҙер әйтеп, ҡолағын тешләтеп, аҙаҡ ҡапыл ғына юғалған егете булған. «Хәҙер иһә нәҙерҙе үтәмәйенсә сара юҡ. Ҡыҙ ҙа, көрәшеп еңгән батырға ғына барам, тип, йола ҡушҡанды үтәү яғында тора. Майҙанға котмәгәндә Һаҡмар буйынан Юлдыбай (варианттарҙа — Буранбай, Ай-

туған) тигән етемлектә үҫкән бәһләүән егет килеп сыға. Байлығы, батырлығы менән танылған, Гөлзифаны икенсе бисәлеккә алырға йөрөгән «кейәү егете» көрәштә еңелә, әммә барыбер үҙ һүҙен һүҙ итмәксе. Стражниктарын эйәртеп, ҡустыһын ҡотларға тип, ағаһы — кантон хәҙрәт килеп төшә. Кантон Юлдыбайҙы ҡулға алырға бойора, ҡыҙҙы, атаһы менән алдан килешеп ҡуйғанса, бай егеткә биреү тейеш тигән талап ҡуя. Халыҡ, ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡаршы төшә. Артабанғы ваҡиғаларҙа ла халыҡ гәҙеллекте, Гөлзифа менән Юлдыбайҙың мөхәббәтен яҡлаусы көс булып сығыш яһай. Юлдыбай, Себер һөрөлөп, үлеп ҡалған тигән хәбәр таратып, Гөлзифаны бай егеткә сығырға күндерәләр. Әммә Юлдыбай ҡасып ҡотолған булып сыға һәм ул Гөлзифаны ҡотҡарып алмаҡсы. Гөлзифаға һәм халыҡ алдында ул үҙенең көрәштә еңгән батыр, бала сағында ҡолағын тешләтеп йәрәштерелгән егете Уралбай булыуын асып һала. Гөлзифа һөйгән егете менән ҡасып китергә ризалыҡ бирә...

«Башҡорт туйы», М. Буранғолдоң күп кенә башҡа сәхнә әҫәрҙәре һымаҡ, этнографизм, көнкүреш, уйын, йола элементтарына өҫтөнлөк бирелгәнлеге өсөн тәнҡиткә эләгә, иҫке рухлы әҫәр тип баһалана. М. Буранғол 30-сы йылдар башында, ваҡиғаларҙың социаль асылына, түрәләр менән ярлылар араһындағы синфи ҡаршылыҡтарға баҫымды көсәйтә төшөп, әҫәрҙең яңы вариантын яҙа[1]. 1939 йылда әҫәрҙең «Гөлсәсәк» тигән тағы бер варианты барлыҡҡа килә. 1941 йылда Мәскәүҙә Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәтенең декадаһын үткәреүгә әҙерлек һәм уның репертуарына индерелеү айҡанлы «Башҡорт туйы»н автор тағы бер тапҡыр редакторлап, пьеса урыҫ теленә тәржемә ителә. Үкенескә ҡаршы, һуғыш башланыу арҡаһында был пландарҙы тормошҡа ашырыу насип булмай. Бынан һуң М. Буранғол «Башҡорт туйы»ның йәнә өс вариантын әҙерләй. Варианттарҙың һәр береһенең мотивы төп урында ҡалдырыла, ярлы халыҡ менән байҙарҙың бәрелеше төп ҡаршылыҡты билдәләй, ә йола, көнкүреш элементтары торған һайын кәмей һәм күренештәрҙе берберeһенә бәйләү сараһы ғына булып ҡала бара. Әммә синфи көрәш догмалары нигеҙендә ҡуйылған талаптар менән шәхес ирке, дөйөм кешелек кимәлендәге рухи ҡиммәттәр араһындағы нисбәтте һаҡлау автор өсөн үтә ауыр мәсьәләгә әйләнгәндер, күрәһең. Быны шунан да күрергә була: ҡасандыр М. Буранғол бер варианттан икенсеһенә, икенсеһенән өсөнсөһөнә күсеп, тағы бер нисә мәртәбә синфи ҡаршылыҡты көсәйтәм тип баш ватырға мәжбүр булһа, 90-сы йылдар башында Башҡорт академия драма театрында «Башҡорт туйы»н, ниһайәт, яңынан сәхнәләштергән режиссер Рифҡәт Исрафилов спектаклде әҙерләүгә халыҡ йырҙарын, йолаларын һәм бейеүҙәрен сәхнәләштереүсе фольклор белгесе Розалия Солтангәрәеваны ылыҡтыра, шуның өҫтөнә тамашаға ошо уҡ үҙенсәлекле ҡобайырсы баҫҡарыуында Халыҡ рухы образын индерә! Исеме үк «Башҡорт туйы» булғас, тәбиғи, милли ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, туй

[1] Әҙиптең беҙҙең дәүерҙә донъя күргән тәүге сағыштырмаса тулы тип әйтерлек һайланма пьесалар йыйынтығына «Башҡорт туйы» драмаһының 1930—1932 йылдарҙа эшләнгән варианты индерелгән. Ҡарағыҙ: Буранғолов М. Таштуғай: Пьесалар. Өфө, 1994.

йолаларының, фольклор-этнографик элементтарҙың, боронғо тормош-көнкүреш күренештәренең ҙур ғына урын алыуына ла бирәү ҙә екһенмәй.

«Башҡорт туйы», драма әҫәре булараҡ, жанр йәһәтенән М. Буранғол ижадында һәм, ғөмүмән, башҡорт драматургияһында айырым урында тора. Уның төп үҙенсәлеге, күренекле драматургтың **фольклор-этнографик** характерҙағы пьесаларының береһе булыуы менән бергә, ғәҙәттәгесә фольклор элементтарын, йыр-моңдо, легенданы файҙаланыу ғына түгел, тотош сюжет үҫешенең йола күренештәрен — туй йолаһын атҡарыуға ҡоролоуы менән билдәләнә. Әҫәрҙә иҙелгән халыҡтың бай түрәләрҙең ғәҙелһеҙлегенә, мәкер-золомона ҡаршы көрәшен, тормоштағы ҡаршылыҡтарҙы, конфликтлы ситуацияларҙы ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү, никахлашыу, туй үткәреү ваҡиғалары менән бер бөтөн итеп һүрәтләү автор өсөн ғәйәт ҡатмарлы ижади проблемаға әйләнгәндер, күрәһең. Был хаҡта И. Бүләковтың: «Урыны менән йола-ғәҙәт элементтары, туй ритуалдары, уйын-көлкө, йыр-бейеү күренештәре унда артыҡ ҙур урын алып та киткеләй. Шул арҡала социаль-синфи ҡаршылыҡ, геройҙарҙың үҙ мөхәббәттәре өсөн көрәше онотолғандай була. Пьесала йә тормош-көнкүреш элементтары, йә туй-мәжлес, уйын-йыр картиналары береһен-береһе баҫып алып китә», — тигән һүҙҙәре урынлы әйтелгән. Әммә, шул уҡ ваҡытта, тәнҡитсе билдәләгәнсә, йыр, ҡурай уйнау, майҙан-бәйге тотоу, һамаҡ, бәйет, сеңләү, теләк әйтеүҙәр, туй процесы кеүек йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәтте киң сағылдырған «Башҡорт туйы» әҫәре элекке дәүер тамашасыларын да, хәҙерге быуын кешеләрен дә ысынбарлыҡтың күркәм күренеше булараҡ мауыҡтыра, йола, ғөрөф-ғәҙәт был спектаклдә тулы мәғәнәһендә халыҡсан бер тамашаға әйләндерә.

М. Буранғолдоң «Ашҡаҙар», «Ялан Йәркәй», «Шәүрәкәй» һымаҡ башҡорт халҡының йыр тарихтары сюжеты нигеҙ итеп алынған пьесалары араһында «Таштуғай» әҫәре лә бар. Был фажиғәле мөхәббәт тарихына ул 1938 йылда мөрәжәғәт итә һәм, алда әйтелгәнсә, башта уны проза теле менән яҙып сыға, артабан шул уҡ сюжетҡа либретто, «Таштуғай» пьесаһының ике вариантын ижад итә. Пьесаны, үкенескә ҡаршы, сәхнәләштереү йә булмаһа баҫып сығарыу насип булмай. Тарихи-этнографик йүнәлештәге был тип драмалар менән йәнәш фольклорҙың башлыса героик эпос материалын, халыҡ хәтерендә һаҡланған тарихи ваҡиғаларҙы һәм легендар тарихи шәхестәрҙе үҙәккә ҡуйған «Ҡараһаҡал» (1930—1959) драмаһы, «Мәргән» (1939), «Туҡтар менән Гөлнур» (1944—1947) либреттолары, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» (1940) трагедияһы шул дәүер башҡорт әҙәбиәтенең **тарихи драматургия** өлгөләрен тәшкил итә. Был йәһәттән М. Буранғол ижадын уның замандашы Б. Бикбайҙың тарихи драмалары менән сағыштырырға мөмкин. Шул уҡ осорҙа Б. Бикбай «Ҡарлуғас» (1937), «Салауат» (1941—1949), «Ҡаһым түрә» (1942—1957) тарихи драмаларын ижад итә, хатта улар нәҡ икәүләп ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1945 йылғы ҡарарына «барып керәләр» һәм 1946 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзы йыйылышында «милләтселек тенденциялары» өсөн ҡаты тәнҡиткә эләгәләр. Йәғни нәҡ 30—40-сы йылдарҙа М. Буранғол һәм уның артынса Б. Бикбай драматургияла халыҡ та-

рихын күтәреү, милли-азатлыҡ хәрәкәттәрен һәм, гөмүмән, тарихи теманы эшләү миссияһын ҙур ныҡышмалылыҡ менән дауам итәләр, ниндәй генә тынсыу атмосфера тыуҙырылыуға ҡарамаҫтан, әҙәбиәтебеҙҙең алтын фондына инерҙәй күренекле әҫәрҙәр яҙып ҡалдырыуға өлгәшәләр. М. Буранғолдоң «Иҙеүкәй менән Мораҙым»ы иһә башҡорт драматургияһында трагедия жанрының тәүге уңышлы өлгөләренең береһе була.

Әйткәндәй, М. Буранғолдоң һәм Б. Бикбайҙың тарихи пьесалары асылда башҡорт тарихының иң шанлы һәм һынылышлы осорҙарын әҙмәәҙле художестволы-эстетик үҙләштереү маҡсатын үтәй. Был, дөйөмләштереп ҡарағанда, 1812 йылғы Ватан һуғышы героикаһы» («Ҡаһым түрә»), 1773 — 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы һәм уның легендар батыры, сәсән-импровизатор Салауат Юлаев образы («Салауат»), Салауат яуынан алдағы милли һәм социаль азатлыҡ көрәше («Ҡарлуғас»), 1736—1740 йылдарҙағы дәһшәтле башҡорт хәрәкәттәре («Ҡараһаҡал»), халыҡтың XV — XVI быуат башындағы көрәш ваҡиғалары («Мәргән», «Туҡтар менән Гөлнур»), XIV быуат аҙағы — XV быуат башында башҡорттарҙың яуыз Алтын Урҙа ханы Туҡтамышҡа ҡаршы баш күтәреүе («Иҙеүкәй менән Мораҙым»).

«Иҙеүкәй менән Мораҙым», автор үҙе билдәләгәнсә, шул уҡ исемдәге башҡорт халыҡ эпосы нигеҙендә яҙылған «өс шаршаулы, алты картиналы трагик әҫәр». Эпостың үҙендә лә, шул нигеҙҙә барлыҡҡа килгән трагедияла ла башҡорт халҡының милли һәм социаль көрәш мотивтары, Алтын Урҙа һәм унан ҡалған яуыз бейҙәрҙе туҙҙырып, башҡорт ырыу һәм ҡәбиләләренең берләшеүе, илдә ҡәрҙәшлек, татыулыҡ урынлаштырылыуы сағылдырыла. Әммә «Иҙеүкәй менән Мораҙым», алда әйтелгәнсә, ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1945 йылдың 27 гинуарында ҡабул ителгән билдәле ҡарарына эләгә. М. Буранғол тарихи дөрөҫлөктө боҙоп күрһәтеүҙә, хатта башҡорт халҡын урыҫ халҡына ҡаршы ҡуйыуҙа ғәйепләнә. Шуныһы аяныслы: был үлемесле сәйәси ярлыҡты М. Буранғолға ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем күтәрергә тура килде. 70—80-се йылдарҙа ла әле, илдә яңырыу процесы башланғанға тиклем, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тыйылған һәм идеологик яҡтан зарарлы әҫәрҙәр исемлегендә булды. Ниһайәт, эпос үҙе 1989 йылдың гинуарында ғына яңынан донъя күрҙе.

1990 йылда яңы ойошторолған Республика йәш тамашасылар театры үҙенең иң беренсе спектакле итеп Мөхәммәтша Буранғолдоң «Иҙеүкәй менән Мораҙым» трагедияһын күрһәтте. Халыҡ сәсәненең драма әҫәрҙәре, ярты быуат буйы ғәҙелһеҙгә тыйылып торғандан һуң, өр-яңынан башҡорт театрҙарының репертуарында, тимәк, халҡыбыҙҙың рухи донъяһында ныҡлы урын ала.

**Мөхәммәтша Буранғолдоң башҡорт әҙәбиәте тарихындағы урыны.** Башҡортостандың халыҡ сәсәне, атаҡлы фольклорсы, башҡорт драматургияһының классигы Мөхәммәтша Буранғолдоң ярты быуатҡа һуҙылған ҙур ижад юлы милли әҙәбиәтебеҙҙең тарихында яҡты эҙ ҡалдырҙы, ул үҙенең көслө ихтыяры һәм тогро күңеле менән башҡорт донъяһында оло мөхәббәт ҡаҙанды. Рәсәй Федерацияһы Художество академияһының ағза-корреспонденты, СССР-ҙың халыҡ, Башҡортостандың атҡаҙанған

рәссамы Әхмәт Лотфуллин һүҙҙәре менән әйтһәк, Мөхәммәтша Буранғол — башҡорт халҡының иң уҙаман, иң бөйөк улдарының береһе. Ул башҡорт милләтенең рухи сағылышы, республика һәм халҡыбыҙ кисергәндең барыһын да кисергән, ботөнөһөн дә үҙ йөрәге аша үткәргән оло йөрәкле шәхес, ысын талант эйәһе ине.

Атаҡлы әҙип, сәсән һәм фольклорсы ғалим Мөхәммәтша Буранғолдоң әҫәрҙәрен барлап, баҫтырып сығарыу, бай ғилми һәм ижади мираҫын ойрәнеү эше хәҙерге башҡорт әҙәбиәт белеме һәм фольклористика өлкәһендә гәйәт ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Башҡортостандың «Китап» нәшриәтендә 1994 йылда, ниһайәт, уның пьесалары «Таштуғай» тигән исем менән ҡалын бер том булып баҫылып сыҡты. Йыйынтыҡҡа М. Буранғолдоң бер тиҫтәнән артыҡ сәхнә әҫәрҙәре, шул иҫәптән башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына ингән «Башҡорт туйы», «Ашҡаҙар», «Шәүрәкәй», «Ҡараһаҡал», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Таштуғай» драмалары тупланған. Сәсәндең халыҡ ижадын өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәре «Сәсән аманаты» (1994) исемле китабында урын алды. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдарының тырышлығы менән халыҡ сәсәненең ижадына арналған мәҡәләләр йыйынтығы донъя күрҙе. Алда М. Буранғолдоң тормош юлын, ғилми һәм әҙәби мираҫын монографик планда өйрәнеү бурысы тора.

Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранғолов 1966 йылдың 6 мартында Өфө ҡалаһында вафат булды. Ул Өфөнөң мосолмандар зыяратында ерләнгән.

• • •

1. Мехәммәтша Буранғолдоң тормош юлы буйынса хронологик конспект төҙеп килегеҙ, яҙыусы кисергән ауырлыҡтар хаҡында үҙ фекерегеҙҙе еҫтәгеҙ.
2. Мехәммәтша Буранғоловтың шәхесенә хас ниндәй сифаттар һеҙгә айырыуса ныҡ оҡшай? Улар нимәлә сағыла?
3. Сәсәндең халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыу һәм өйрәнеү өлкәһендәге хеҙмәттәре хаҡында (әҫәрҙәренең исемдәрен һанап, йекмәткеләренә ҡыҫҡаса аннотациялар биреп) алдан бирелгән һорауҙар ярҙамында сығыш яһарға әҙерләнеп килегеҙ.
4. Яҙыусының драматургия өлкәһендәге хеҙмәттәре хаҡында һөйләгеҙ. Ниндәй сәхнә әҫәрҙәре яҙған, унда ниндәй хәл-ваҡиғалар кәүҙәләндерелгән?
5. «Ашҡаҙар» пьесаһының тарихи ерлеге, образдары, теп идеяһы тураһында һөйләгеҙ.
6. «Башҡорт туйы» пьесаһында һүрәтләнгән осор, әҫәрҙең конфликты, сюжеты, драматургик эшләнеше хаҡында фекер алышығыҙ.

рәссамы Әхмәт Лотфуллин һүҙҙәре менән әйтһәк, Мөхәммәтша Буранғол — башҡорт халҡының иң уҙаман, иң бөйөк улдарының береһе. Ул башҡорт милләтенең рухи сағылышы, республика һәм халҡыбыҙ кисергәндең барыһын да кисергән, бөтөнөһөн дә үҙ йөрәге аша үткәргән оло йөрәкле шәхес, ысын талант эйәһе ине.

Атаҡлы әҙип, сәсән һәм фольклорсы ғалим Мөхәммәтша Буранғолдоң әҫәрҙәрен барлап, баҫтырып сығарыу, бай ғилми һәм ижади мираҫын өйрәнеү эше хәҙерге башҡорт әҙәбиәт белеме һәм фольклористика өлкәһендә гәйәт ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Башҡортостандың «Китап» нәшриәтендә 1994 йылда, ниһайәт, уның пьесалары «Таштуғай» тигән исем менән ҡалын бер том булып баҫылып сыҡты. Йыйынтыҡҡа М. Буранғолдоң бер тиҫтәнән артыҡ сәхнә әҫәрҙәре, шул иҫәптән башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына ингән «Башҡорт туйы», «Ашҡаҙар», «Шәүрәкәй», «Ҡараһаҡал», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Таштуғай» драмалары тупланған. Сәсәндең халыҡ ижадын өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәре «Сәсән аманаты» (1994) исемле китабында урын алды. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдарының тырышлығы менән халыҡ сәсәненең ижадына арналған мәҡәләләр йыйынтығы донъя күрҙе. Алда М. Буранғолдоң тормош юлын, ғилми һәм әҙәби мираҫын монографик планда өйрәнеү бурысы тора.

Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранғолов 1966 йылдың 6 мартында Өфө ҡалаһында вафат булды. Ул Өфөнөң мосолмандар зыяратында ерләнгән.

• • •

1. Мөхәммәтша Буранғолдоң тормош юлы буйынса хронологик конспект төҙөп килегеҙ, яҙыусы кисергән ауырлыктар хаҡында үҙ фекерегеҙҙе еҫтәгеҙ.
2. Мехәммәтша Буранғоловтың шәхесенә хас ниндәй сифаттар һеҙгә айырыуса нык оҡшай? Улар нимәлә сағыла?
3. Сәсәндең халык ижады әҫәрҙәрен йыйыу һәм өйрәнеү өлкәһендәге хеҙмәттәре хаҡында (әҫәрҙәренең исемдәрен һанап, йөкмәткеләренә ҡыҫҡаса аннотациялар биреп) алдан бирелгән һорауҙар ярҙамында сығыш яһарға әҙерләнеп килегеҙ.
4. Яҙыусының драматургия өлкәһендәге хеҙмәттәре хаҡында һөйләгеҙ. Ниндәй сәхнә әҫәрҙәре яҙған, унда ниндәй хәл-ваҡиғалар кәүҙәләндерелгән?
5. «Ашҡаҙар» пьесаһының тарихи ерлеге, образдары, төп идеяһы тураһында һөйләгеҙ.
6. «Башҡорт туйы» пьесаһында һүрәтләнгән осор, әҫәрҙең конфликты, сюжеты, драматургик эшләнеше хаҡында фекер алышығыҙ.